Мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

**Танып белеү. Аң - белем үҫтереү ТББЭ:**

# Йылы икмәк ҡайҙан килгән?

**(Өлкәндәр төркөмө)**



# Йылы икмәк ҡайҙан килгән?

**Маҡсат:** балаларға икмәк тең көндәлек аҙыҡ булыуы тураһында төшөнсә биреү.

икмәктең ҡайҙан килеүе, кемдәр уны үҫтереүе, нисек бешерелеүе тураһында һөйләү.

игенсе һөнәренә һөйөү һәм икмәккә ихтирам тәрбиәләү,.

**Йыһазландырыу**: һүрәттәр, он һалынған тәрилкә.

**Һүҙлек эше**: татлы, аппетитлы, икмәк заводы.:

**Интеграция:** *Нәфис әҙәбиәт*. Шиғыр һөйләү

**Коммуникация**: Телмәр үҫтереү. Сюжетлы һөйләү.

**Тәбиғи белем биреүҙең бпрышы**

-Балалар, һеҙ бөгөн иртәнге ашта нимәләр ашанығыҙ?

- Һөтлө бутка, икмәк, сәй

- Ә кисә?

- Омлет, майлы икмәк, кофе.

- Ә төшкө ашҡа нимә бирҙеләр?

- Борщ, вермишель менән кәтлит, икмәк, компот.

- Балалар, менюла көн һайын аҙыҡтар үҙгәреп тора, ә ниндәй аҙыҡбер ҙә үҙгәрмәй ҡала икән?

- Афарин, әлбиттә икмәк.

- балалар, ә һеҙ икмәкте яратаһығыҙмы?

- Ә ниндәй икмәкте ятатаһығыҙ?

- Аҡ икмәкте, йөҙөмлө булканы, йомшаҡ икмәкте һ. б.

- Әйҙәгеҙ бергәләп уйлайыҡ һәм икмәк тураһында һүҙҙәр эҙләйек. Икмәк ниндәй була икән?

- Йомшаҡ, тәмле, ҡаты, аҡ, эҫе, яңы бешкән, еҫле, аппетит тыуҙырыусы.

- Әлбиттә икмәк төрлө була. Әммә һәр ваҡыт тәмле, файҙалы булып ҡала.

- Балалар, кем белә, беҙгә икмәк ҡайҙан килә икән?

- Әсәй магазиндан һатып ала.

- Ә магазинға ҡайҙан килә икән? Был турала белгегеҙ киләме? Әйҙә улайһа тыңлағыҙ.

- Тәүҙә бойҙайҙы ергә сәсәләр.



- Бының өсөн айырым сәсеү машиналары бар.




- Бына ошондай  башаҡтар үҫеп сыға.



- Бойҙайҙы йыйып алғас тирмәнгә оҙаталар.



- Бойҙайҙан тирмәндә он эшләйҙәр. Бына ҡарағыҙ әле минең тәрилкәмдә он һалынған. Уны ҡулығыҙ менән тотоп ҡарағыҙ әле. Ул ниндәй икән?
- Йомшаҡ, таралып тора.





- Был ондан икмәк заводында икмәктәр, булочкалар бешерәләр.
- Әйҙәгеҙ бергә уйнап алайыҡ.

Физкультминутка:

Өҫтән беҙгә ел иҫте

Үләндәрҙе һелкетте.

Сәскәләрҙе һелкетте

Уңға – һулға эйелтте (Уңға- һулға эйелеү)

Һикерешәйек урында.

Ә хәҙер беҙ дәртлерәк (һикереү)

Күңеллерәк, бына шулай.

Атлап киттек бергәләп. (урында атлау)

Бына уйын да бөттө.

Эшләргә ваҡыт етте.

- Балалар кем әсәһенең ҡамыр әҙерләгәнен күргәне бар?
- Он, һыу һала.
- Әйе. Ә хәҙер ҡарағыҙ әле нимәләр һалалар икән ҡамырға?















- Әйҙәгеҙ уларҙы әйтеп үтәек.
- Ҡамыр әҙер булыу менән уны формаға һалалар һәм мейескә ҡуялар. Икмәк әҙер булғас машинаға тейәп магазиндарға оҙаталар.
- Балалар ондан тағы нимәләр бешерәләр әле?
- Булка, батон, пирожки, бәлеш, пирог һ. б.
- Афарин. Мин һеҙгә дәрескә икмәктән бешерелгән печеньелар алып килдем. Бергәләп сәй эсерһегеҙ.

**Дидактик уйын.”Дөрөҫ һал”**

Маҡсат: икмәктең өҫтәлгә килеү юлын дөрөҫ һалыу.

Йомғаҡлау.